РЕСПУБЛИКАНСКАЯ ОЛИМПИАДА ШКОЛЬНИКОВ НА КУБОК имени Ю.А. ГАГАРИНА

2021-2022 учебный год

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

ШКОЛЬНЫЙ ЭТАП

5 класс

***Максимальное количество баллов за задания:***

| Задания | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | Сумма |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Количество баллов | 5 | 5 | 7 | 5 | 5 | 5 | 6 | 6 | 7 | 5 | 6 | 8 | 70 |

***Все оценки должны быть целыми числами, дробные оценки не допускаются!***

## ОТВЕТЫ И РЕКОМЕНДАЦИИ ДЛЯ ПРОВЕРКИ

| *Һорауҙың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (балл)* |
|---|---|---|
| **1-се һорау** | Һәр дөрөҫ төҙөлгән һөйләмгә бер балл, һөйләм дөрөҫ төҙөлмәһә, балл ҡуймайбыҙ:<br>**Йәйге ҡояш батты. Һалҡынса ел иҫте. Ул ҡарағастарҙың йәшел ылыҫына бәрелеп тынып ҡалды. Мин ҡарағастарға ҡараным. Минең алда зифа буйлы матур-матур ҡарағастар.** | **5 балл** |
| **2-се һорау** | Һәр дөрөҫ яуапҡа бер балл ҡуйыла. Уҡыусылар башҡа һүҙҙәр ҙә яҙырға мөмкиндәр, әммә күп нөктә урынына ҡуйылған һүҙҙәр һөйләмдең мәғәнәһенә тура килергә тейештәр:<br>**1) Сәлим сана шыуа.**<br>**2) Сафа гәзит уҡый.**<br>**3) Айгөл телевизор ҡарай.**<br>**4) Сәғит  ҡар көрәй.**<br>**5) Хәлимә шәл бәйләй** | **5 балл** |
| **3-сө һорау** | Дөрөҫ күсереп алынған һәр һүҙгә бер балл:<br>**юрған, таҡыя, ямғыр, егет, яҙыусы, юл, еләк** | **7 балл** |
| **4-се һорау** | Дөрөҫ тәржемә ителгән һәр һүҙгә бер балл:<br>**Шағир – поэт**<br>**Яҙыусы – писатель**<br>**Дәүләт – государство**<br>**Ватан – Родина**<br>**Яҙмыш - судьба** | **5 балл** |
| **5-се һорау** | Ребусты дөрөҫ сисһә, 5 балл ҡуйыла:<br>**Талҡаҫ** | **5 балл** |
| **6-сы һорау** | Һәр дөрөҫ яуапҡа бер балл:<br>**Күбәләк – күбәләгеңде**<br>**Йылан – йыланыңды**<br>**Китап – китабыңды**<br>**Ҡәләм – ҡәләмеңде**<br>**Дуҫ – дуҫыңды** | **5 балл** |

| *Һораузың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (балл)* |
|---|---|---|
| **7-се һорау** | Дөрөҫ төҙөлгән һәр һүҙбәйләнешкә бер балл ҡуйыла. Уҡыусылар башҡа төрлө ялғауҙар ҡушып та сифат яһай алалар:<br>**Күҙ – күҙгө тәбиғәт** **Юл – юлһыҙ ер**<br>**Бәхет – бәхетле бала** **Иртән – иртәнге аш**<br>**Мал – маллыҡ аҡса** **Белем – белемле бала** | **6 балл** |
| **8-се һорау** | Эш тулыһынса дөрөҫ башҡарылһа, 6 балл ҡуйыла. Уҡыусылар башҡа төрлө һүҙбәйләнештәр ҙә яһай алалар.<br>**Ике китап, өс ҡәләм, утыҙ уҡыусы, миллион кеше, туҡһан һарыҡ, мең бала** | **6 балл** |
| **9-сы һорау** | Дөрөҫ яҙылған һәр һүҙгә бер балл:<br>**Ялан баш, юлъяҙма, ҡарағаш, ҡульяулыҡ, меңьяпраҡ, төньяҡ, тирә-як** | **7 балл** |
| **10-сы һорау** | Һәр дөрөҫ яуапҡа бер балл:<br>**“Өс таған” – повесть**<br>**“Хәмит күпере” – хикәйә**<br>**“Йәмле Ағиҙел буйҙары” – поэма**<br>**“Яралы китап” – хикәйә**<br>**“Турыҡай” – хикәйә** | **5 балл** |
| **11-се һорау** | Мостай Кәрим, тип яҙһалар 3 балл, уның тураһында тулы мәғлүмәт бирһәләр, өҫтәп 3 балл ҡуйыла, тулы булмаған мәғлүмәткә – 1 йәки 2 балл<br>**Мостай Кәрим (тулы исеме – Мостафа Сафа улы Кәримов; 20 октябрь 1919 йыл – 21 сентябрь 2005 йыл) – шағир, драматург, тәнҡитсе, публицист, йәмәғәт эшмәкәре. Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының почётлы академигы (1992). Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы. 1939 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы. 1951-1962 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, 1962-1989 йылдарҙа РСФСР Яҙыусылар союзы идараһы секретары. РСФСР-ҙың IV-XI саҡырылыш Юғары Советы депутаты. Социалистик Хеҙмәт Геройы (1979). Башҡортостандың халыҡ шағиры (1963). РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре (1982). ЮНЕСКО ҡарамағындағы Х.К. Андерсен исемендәге Халыҡ-ара балалар һәм үҫмерҙәр өсөн китаптар советының Почётлы дипломы эйәһе (1978). Ленин премияһы (1984), СССР ҙың Дәүләт премияһы (1972), РСФСР ҙың К.С. Станиславский исемендәге дәүләт премияһы (1967), Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы (1967), М.А. Шолохов исемендәге премия (1999) лауреаты.** | **6 балл** |
| **12-се һорау** | Йөкмәткеһе өсөн – 2 балл,<br>уҡыусының телмәре өсөн – 3 балл,<br>грамоталылығы өсөн – 3 балл ҡуйыла | **8 балл** |